# Яраткан журналым «Акбуҙат»



Башҡортостан Республикаһының балалар журналы

# Аҡбуҙат







"Аҡбуҙат"ым килеп етте –
Ҡәҙерле, матур баҫмам.
Һәр битен асып ҡарап мин
"Шәп журнал!" – тиеп ҡалам.







# Башҡортостан – тыуған ерем!

Башҡортостан! Ниндәй бөйөк исем!

Минең тыуған яғым - Башҡортостан. Беҙҙең республикабыҙ бөйөк Рәсәй киңлектәрендә урнашҡан. Бында бик күп төрлө милләт дуҫлыкта һәм берҙәмлектә йәшәй. Уларҙың уникаль ғөрөф-ғәҙәттәре, боронғо культуралары тыуған яғыбыҙҙың иң мөһим рухи байлығы.

Һәркемгә үҙ тыуған яғы йөрәгенә бик яҡын һәм ҡәҙерле. Ҡайҙа ғына булмаһаң да, ниндәй генә матур ерҙәрҙе күрмәһәң дә күңел барыбер үҙ тыуған яғына тартасаҡ . Тыуған яҡ – ул минең яратҡан ғаиләм һәм туған йортом ғына түгел, тыуған яғым минең бөтә Башкортостаным.

# Тыуған яғым тәбиғәте










**Башҡорт теле**





Мин халҡымдың сәскә күңеленән
Бал ҡортондай ынйы йыямын,
Йыямын да — йәнле ынйыларҙан
Хуш еҫле бер кәрәҙ ҡоямын.

Шуға ла мин беләм тел ҡәҙерен:
Бер телдән дә телем кәм түгел-
Көслө лә ул, бай ҙа, яғымлы ла,
Кәм күрер уны тик кәм күңел.

Халҡым теле миңә-хаҡлыҡ теле,
Унан башҡа минең илем юҡ;
Илен һөймәҫ кенә телен һөймәҫ,
Иле юҡтың ғына теле юҡ!





Әсәм теле миңә — сәсән теле,
Унан башҡа минең халҡым юҡ,
Йөрәгендә халҡы булмағандың
Кеше булырға ла хаҡы юҡ!

Рами Гарипов









# Айыу менән бал ҡорттары
## (әкиәт)

Борон-борон заманда, өйрәк үрәтник, һайыҫҡан дисәтник саҡта, булған, ти, бер тайыш табан айыу. Уның ҡойроғо, төлкө ҡойроғо кеүек үк, оҙон да, йөнтәҫ тә булып, өрпәйеп торор булған ти.

Айыу бал яратҡан. Балһыҙ йәшәй ҙә алмаған. Гел генә бал ашауҙы уйлаған да йөрөгән. Бал ҡорттары мыжлап торған ағас ҡыуышын күрҙеме, айыуҙың шатлығы эсенә һыймай башлай икән. Ул, аушаңлап, ағас башына менә лә, умартаны пыр туҙҙырып, бал ашарға тотона икән. Бал ҡорттары айыуҙы һырып алалар ҙа сағырға маташалар, әммә булдыра алмайҙар. Сөнки айыуҙың йөнө оҙон, ә бал ҡорттарының ҡаяуҙары ҡып-ҡыҫҡа. Улар, айыуҙың тәненә яҡынлашырға тырышып, йөн араһына инәләр-инәләр ҙә шунда сырмалып бөтәләр. Ә айыуға шул ғына кәрәк тә. Ул ағастан төшә һала ла ерҙә аунай башлай. Йөн араһында буталып ҡалған бал ҡорттары иҙеләләр ҙә бөтәләр. Улай ҙа булмаһа, һыуға барып бер сумып ала, ти, был, бал ҡорттары шунда сыланып, ҡойолоп төшәләр. Шунан һуң айыу йәнә ағас башына менеп китеп, солоҡтағы бал бөткәнсе, үҙенең эсе күпкәнсе, һыйлана икән, ти.

Бер ваҡыт урманға утын алырға бер кеше килгән икән. Ипләберәк ҡараһа, ағас башында бал ашап ултырған айыуҙы күреп ҡалған. Үҙе бал ашай, ти, айыу, ә йөнтәҫ оҙон ҡойроғо менән бал ҡорттарын ҡыуа икән, ти.

– Әх, һин, тайыш табан, тайыш табан! Ҡорттарҙы ҡырып, әҙер балды ашап йөрөйһөң икән әле! Муйыныңды өҙмәһәмме, бына күр ҙә тор!– тип, теге кеше ағас башына менеп киткән. Ул айыуға ҡарап балтаһын һелтәгән. Әммә балта айыуҙың муйынына түгел, ә ҡойроғона тап килеп, уны сабып өҙгән. Шулай итеп, тайыш табан айыу оҙон йөнтәҫ ҡойроғо менән бөтөнләйгә хушлашҡан. Айыу ағастан төшкән дә, башын түбән баҫып, урман араһына инеп юғалған.





Шунан бирле айыуҙар сонтоҡ ҡойроҡло булып ҡалғандар, ти.

Теге кеше солоҡто яҡшылап ҡарап, юнәтеп сыҡҡан, кәрәҙҙәрҙе үҙ урынына ҡуйған да ҡайтып киткән.

Бал ҡорттары быны күреп, башта ғәжәпләнгәндәр. Улар инә ҡорттан:

– Ниңә был кеше беҙҙең балыбыҙҙы ашап бөтөрөп китмәне икән? – тип һорағандар. Инә ҡорт ни тип яуап ҡайтарырға белмәгән. Шулай ҙа ул бал ҡорттарына:

– Барығыҙ, осоп етегеҙ ҙә ул кешенән беҙҙең балыбыҙҙы ниңә ашамауын һорағыҙ,– тигән, ти.

Бал ҡорттары теге кешене ҡыуып етеп һорағас, ул:

– Әгәр мин балығыҙҙы ашаған булһам, үҙегеҙгә ҡыш ашауға нимә ҡалыр ине? Һеҙ ҙә астан үлер инегеҙ, йәренгә мин дә балһыҙ ҡалыр инем, – тип яуап биргән, ти.

Бал ҡорттары солоҡҡа әйләнеп ҡайтҡандар ҙа инә ҡортҡа теге кешенең һүҙҙәрен әйтеп биргәндәр.

Шул саҡта инә ҡорт кәңәшкә бөтә ҡорттарҙы йыйған. Бал ҡорттары, ул кешегә күмәкләп барырға ла, үҙҙәрен айыуҙан һаҡлауын һорарға, тип кәңәш иткәндәр, ти.

Ҡорттар ауылға, теге кеше янына барып:

– Беҙҙе яуыз айыуҙан ҡотҡара күр, үҙ эргәңә ал. Ә беҙ һиңә бының өсөн рәхмәт әйтербеҙ, – тигәндәр, ти.

– Яҡшы! Мин һеҙгә бик һәйбәт итеп умарта эшләрмен. Һеҙ шунда йәшәрһегеҙ, бал йыйырһығыҙ,– тип яуап биргән ти, кеше.

Шул көндән бирле бал ҡорттары кешеләрҙе бал менән һыйлай башлаған, ти.







ylei.ucoz.com



# КҮҢЕЛЛЕ БАЛАСАҒЫМ












**Был һүрәттә рәссам ниндәй хата ебәргән?**

# Дуҫтар, һүрәттә нисә сыскан күрәһегеҙ?







# Ҡала бесәйе һәм ауыл бесәйе

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, ике бесәй: ҡала бесәйе һәм ауыл бесәйе. Ҡала бесәйе аҡ төҫтә һәм һимеҙ булған. Ул ҙур, матур һәм йылы өйҙә көн иткән. Көнө-төнө ашап, йомшаҡ түшәктә йоҡо һимерткән. Хужабикә уны һөт, ит, «Вискас" менән генә һыйлаған. Ә бына ауыл бесәйе ҡара төҫтә, бик ныҡ ябыҡ икән, ти. Ул көнөн күберәк саф һауала үткәргән. Һунарға йөрөгән, үҙ тамағын үҙе ҡайғыртҡан. Көн дә йүгереү, саф һауала булыу, сысҡан тотоу — уны көслө яһаған. Был бесәй бик аҡыллы, һиҙгер булған.

Ҡала бесәйе бик рәхәт йәшәгән. Бына бер көн ауыл бесәйе ҡала бесәйен күреп: «Нисек уға көнө-төнө йоҡлап ятыу ялҡытмай?» -— тип уйлаған. Ә ҡала бесәйе: «Нисек көн оҙонона бер сысҡан артынан йүгереп йөрөп арымай ул?» — тип аптырап ҡараған.

Шулай ике бесәй бер-береһен һаман аңлай алмай йөрөйҙәр икән, ти.

## Ҡапма –ҡаршы һүҙҙәрҙе әйт

иртә- һуң ҡыш- … тиҙ - …

еңел- … киң - …алыҫ - …

килделәр- … өләсәй - …батыр - …

дуҫ - … төн - .. күп - …

## Аҙашҡан хәрефтәр

ЛЫҠҘЫ, ҠА, ККҮ, ОҺРО, ШӘЛЙЕ, ААҠР, ЫҺАР, ЛА.

# Дуҫтар, тыуған илебеҙҙе беләһегеҙ микән?

**ҺОРАУҘАР:**



1. Башҡортостандағы йыртҡыс ҡош.
2. Башҡорт халыҡ йыры.
3. Башҡортостандың халыҡ музыка ҡоралы.
4. Салауат районындағы шишмә.
5. Башҡорт халыҡ эпосындағы геройҙың исеме.
6. Башҡорттарҙың тоғро юлдашы.
7. Милли батырыбыҙ.
8. Башҡорттарҙың изге ҡошо.





**Яуаптар**:

1.Бөркөт 2.Таштуғай 3.Ҡурай 4.Ҡорғаҙаҡ 5.Урал 6.Ат 7.Салауат 8.Торна

# Фразеологизмдар



Төпһөҙ кәмәгә ултырған



Тишеккә инеп китерҙәй булдым



Торған урынында йоҡлай



Крокодил күҙ йәше сығарып



## ***“Башҡортостан – илгенә***

*А.Игебаев һүҙҙәре*

1. Сабый саҡтан күкрәгемә
Тамыр йәйгән  гөлгенәм,
Һулыш биргән, тормош  биргән
Әсәйемдәй  бергенәм.

***Ҡушымта:***

*Башҡортостан – илгенәм,илгенәм, илгенәм,*
*Гөлдәр менән  тиңгенәм*
*Тамыр йәйгән  гөлгенәм,*
*Гөлгенәм, гөлгенәм.*
*Башҡортостан – илгенәм*




Башҡортостан -
илгенәм

***Автор:***

Борай районы Яңы Йәлдәк ауыл китапханаһы